Ғилем һәм ғәмәл

# ИМАНДЫҢ АЛТЫ ШАРТЫ

*(Башы 11-12 һанда. Дауамы бар).*

## 4-се дәрес

Бөгөн беҙ иман шарттары тураһында һөйләшәсәкбеҙ. Алдағы дәрестә иһә беҙ “Лә иләһә илләллаһ” мәғәнәһе тураһында һөйләшкән инек. “Лә иләһә илләллаһ” һүҙен аңлағас та, шуны онотмаҫҡа кәрәк: был иман һүҙен, йәғни шәһәдәтте, юҡҡа сығарыусы күп нәмәләр бар. Үҙен мосолман тип һанаған кеше, ниндәйҙер бер яңылыш төшөнсәне үҙ итеп, ислам диненән сығып китә ала. Йә ниндәйҙер бер ғәмәл ҡылып, был ғәмәле менән кафыр булыр.

Тимәк, имандың үҙ шарттары була. Һәм беҙ шуларҙы үтәгәндә генә мосолман булып һаналырбыҙ. Был иман шарттарын (ғәрәпсә - рөкөндәрен) һәр мосолманға яттан белеү фарыз. Шулай итеп, иманы камил булһын өсөн мосолман алты нәмәгә ышанырға тейеш. Беренсенән - Аллаһы Тәғәләгә, икенсенән - Аллаһы Тәғәләнең фәрештәләренә, өсөнсөнән - Аллаһы Тәғәләнең китаптарына, дүртенсенән - Аллаһы Тәғәләнең пәйғәмбәрҙәренә (ғәләйһим сәләм), бишенсенән - Ҡиәмәт көнөнә, алтынсынан - Аллаһы Тәғәләнең тәҡдиренә, йәғни яҙмышҡа. Ошо иман рөкөндәренең һәр береһенә ҡыҫҡаса туҡталып китәйек.

**Аллаһы Тәғәләгә ышаныу.** Был Уның барлығына, берлегенә ышаныу, тигән һүҙ. Беҙ был турала алдағы дәрестәрҙә күп һөйләштек. Был дәрестә тағы ла ҡайһы бер аяттарҙы ҡарап үтербеҙ. Күп кеше Аллаһы Тәғәләнең барлығын инҡар итмәй. Ләкин Уның тураһында бик аҙ беләләр. Ҡыҙғаныска ҡаршы, йыш ҡына ябай халыҡ араһында, мәҫәлән, “Аллаһ бабай” тигән һүҙ ишетергә тура килә. Ә бит Аллаһы Тәғәләне кеше сүрәтендә күҙ алдына килтереүсе - ул инде мосолман түгел. Беҙ быны турала ла һөйләштек. Шуға ла Аллаһы Тәғәлә Ҡөрьәндә шулай ти: “Уның шикелле бер нәмә лә юҡ” (“Кәңәш” сүрәһе, 42:11). Йәғни, Аллаһы Тәғәлә Үҙе яраткан нәмәләрҙең береһенә лә оҡшамаған. Ул тыуҙырылмаған, тыуҙырмаған, Уның ҡатыны ла, балаһы ла юҡ, Ул һәр ваҡыт булған, бар һәм буласаҡ. Уны был донъяла бер кеше лә күрмәгән һәм күрмәйәсәк тә. Ул, ҡайһы бер ябай кешеләр әйтеүенсә, ниндәйҙер нур, утлы туп йә Ҡояш формаһында ла түгел. Мосолман кеше Аллаһы Тәғәләгә ышана, ләкин Уны күҙ алдына килтермәй. Һәм, шулай уҡ, кешегә хас самалы аҡылы менән Уны аңларға тырышмай. Мәҫәлән, беҙгә Аллаһы Тәғәлә биргән күҙҙәр нисәләр километрҙан ары күрә алмайҙар, ҡолаҡтарыбыҙ иһә ниндәйҙер тауыштарҙы ишетмәй һәм ишетергә һәләтле лә түгелдәр, ә ҡулдар иһә ниндәйҙер ауырлыҡтан арыны күтәрә алмайҙар. Шуның шикелле, беҙҙең аҡылыбыҙ ҙа Аллаһы Тәғәләнең мәңге булыуын, бер нәмәгә лә оҡшамауын, бөтә ваҡиғаларҙы ла алдан белеүен һәм Уның тағы ла башҡа күп сифаттарын тулыһынса аңлап етмәҫкә мөмкин. Һәм был тик беҙҙең көсһеҙлегебеҙҙе генә исбатлай, ә Аллаһы Тәғәләнең юҡлығына дәлил түгел.

Тимәк, имандың беренсе шарты - Аллаһы Тәғәләгә дөрөҫ итеп ышаныу. Ғөмүмән, алдағы дәрестәрҙә беҙ быны турала күп һөйләштек инде.

**Аллаһы Тәғәләнең фәрештәләренә ышаныу.** Был донъяла кешеләр берҙән-бер аҡыл эйәләре түгелдәр. Аллаһы Тәғәлә, беҙҙән тыш тағы ла фәрештәләрҙе һәм ендәрҙе бар иткән. Кешеләр менән ендәрҙән айырмалы рәүештә, фәрештәләр Аллаһы Тәғәләгә бер һүҙһеҙ буйһоналар һәм бер ниндәй ҙә гонаһ эш эшләмәйҙәр. Улар Аллаһы Тәғәләнең әмерҙәрен үтәр өсөн яратылғандар. Мәҫәлән, ҡайһы бер фәрештәләр ямғырҙар менән эш итә, ҡайһылары тауҙарҙы аҫтын өҫкә килтерә ала, ҡайһылары иһә, кеше сүрәтенә инеп, Аллаһы Тәғәләнең әмере буйынса кешеләр менән һөйләшә. Ҡайһылары беҙҙең ҡылған эштәребеҙҙе яҙып ултыралар. Ҡайны бер фәрештәләр Ҡөрьән уҡып ултырыусыларға ҡанаттарын һалып, уларҙы хөрмәт итеп тора. Ҡайһылары Ҡиәмәт көнөндә кафырҙарҙы Йәһәннәмгә ташлар өсөн яратылған. Ә ҡайһылары иһә шул Йәһәннәмдең һаҡсылары булып торасаҡ. Фәрештәләр бик күп, уларҙың һанын Аллаһы Тәғәлә генә белә.

Беҙ ҡайны бер фәрештәләрҙең исемдәрен беләбеҙ. Мәҫәлән, Джибрил фәрештәне, ғәләйһиссәләм. Башҡортса әйтелеше - Ябраил. Аллаһы Тәғәләнән пәйғәмбәрҙәргә вәхи килтереүсе һәм әмер-бойороҡтар еткереүсе фәрештә ул, Ул, шулай уҡ, пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәттең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) яҡын дуҫы ла. Ябраил фәрештә уға бер нисә сүрәттә күренгән ине. Тағы ла Микәил тигән фәрештә бар. Был фәрештә ямғырҙар менән эш итә. Тағы ла Исрафил тигән фәрештә бар. Ул фәрештә, Ҡиәмәт көнө етһә, борғоға өрәсәк. Әлеге ваҡытта ул борғоһон ауыҙына алып, Аллаһы Тәғәләнең әмерен көтөп тора.

Әлбиттә, Аллаһы Тәғәлә өсөн бер ниндәй ҙә ҡыйын эш юҡ. Һәм Ул бар эштәрҙе лә бер ниндәй ауырлыҡһыҙ Үҙе генә лә башҡара алыр ине, сөнки Ул бер кемдең дә ярҙамына мохтаж түгел. Аллаһы Тәғәләнең сифаттарының береһе - Әл-Ҡәүүий, йәғни “Көслө”. Аллаһы Тәғәлә, шулай уҡ, Әл-Ғәний, йәғни “Мохтаж булмаған”. Аллаһы Тәғәлә: “Бул!” - тиһә, Ул теләгән нәмә буласаҡ. Әммә ләкин Ул фәрештәләрҙе барлыҡҡа килтергән һәм уларҙың һәр береһенә билдәле бер эштәр ҡушҡан. Ни өсөн? Фәрештәләрҙе Ул үҙенең барлығын, берлеген һәм бөйөклөгөн күрһәтер өсөн яратҡан.

**Аллаһы Тәғәләнең китаптарына ышаныу.** Аллаһы Тәғәлә ҡайһы бер пәйғәмбәрҙәр аша кешелеккә бер нисә китап ебәргән. Мәҫәлән, Тәүрат (русса - Тора) китабы Муса пәйғәмбәр ғәләйһиссәләм аша бирелгән, Инжил китабы (Евангелие) - Ғайса пәйғәмбәр ғәләйһиссәләм (ғәрәпсә - (F) Иса, русса - Иисус), аша, Забур (Псалтырь) - Дауыт пәйғәмбәр ғәләйһиссәләм аша, һәм һуңғы китап - ул Ҡөрьән, был китап Мөхәммәт пәйғәмбәргә (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) бирелде. Был китаптарҙа Аллаһы Тәғәлә Үҙенең барлығын, берлеген, иман шарттарын, Ахирәт хәлдәрен, әхләк төшөнсәләрен, ғибрәтле тарихи ваҡиғаларҙы, киләсәк хәбәрҙәрен, шәриғәтте аңлатты. Атап үткән китаптарҙың барыһы ла тура юлды күрһәтер өсөн индерелгән ине. Һәм беҙ, мосолмандар, уларға ышанырға тейешбеҙ.

Әммә шундай һорау тыуыуы бар: әгәр был китаптар барыһы ла Аллаһы Тәғәләнән икән, ни өсөн беҙ тик Ҡөрьән буйынса ғына йәшәргә тейешбеҙ һуң? Эйе, был һорау йыш бирелә. Һәм уға яуап ошолай: Ҡөрьәндән алда булған китаптар кешеләр тарафынан үҙгәртелгәндәр. Уларҙы күпләп тәржемә итеү һәм күпләп күсереп яҙыу һөҙөмтәһендә уларға сит һүҙҙәр - кеше һүҙҙәре - килеп ингән. Был турала Аллаһы Тәғәлә Ҡөрьәндә шулай ти: “Әллә һеҙ уларҙың (йәһүдиҙәрҙең һәм насраниҙарҙың) һеҙгә ышаныуына өмөт итәһегеҙме? Улар араһында бит Аллаһ һүҙҙәрен аңлағандан һуң да, уларҙы күрәләтә үҙгәртеп яҙыусылар булды...” (“Һыйыр” сүрәһе, 2:75). Йәғни Аллаһы Тәғәләнең Ҡөрьәндән алда бирелгән китаптары үҙгәртелгәндәр. Тимәк, әлеге көндә йөрөгән Тәүрат (Тора), Инжил (Евангелие) кеүек китаптар тәү хәлендә һаҡланып ҡалмағандар. Һәм бөгөн ул китаптарҙа Аллаһы Тәғәләнең нисә процент һүҙҙәре һаҡланып ҡалғанын беҙ белмәйбеҙ. Бәлки, яртыһынан күберәге лә хатта үҙгәртелгәндер. Шуға күрә ул китаптар инде тура юл күрһәтә алмайҙар. Иң һуңында Аллаһы Тәғәлә кешелеккә Үҙ Рәхмәте менән Ҡөрьән-Кәримде индерҙе. Ҡөрьән - Аллаһы Тәғәләнең Ҡиәмәт көнө алдынан кешелеккә ебәргән һуңғы китабы. Ул ғәрәп телендә ғәрәп пәйғәмбәренә бирелгән булһа ла, бөтә кешеләргә лә берҙәй йүнәлтелгән. “Беҙ һине барлыҡ кешеләргә һөйөндөрөүсе һәм иҫкәртеүсе-өгөтләүсе итеп ебәрҙек...” - ти Аллаһы Тәғәлә тарафынан индерелгән нурға, Ҡөрьәнгә, эйәрергә тейеш. Быны аңлаған кешеләр, ниндәй генә милләттән булыуҙарына ҡарамаҫтан, ислам динен ҡабул итәләр. Һәм шуға күрә лә бөгөн мосолмандар һаны немец, француз, инглиз, рус, ҡытай, япон һәм башҡа халыҡтар араһында арта бара, әлхәмдүлилләһ.

**Аллаһы Тәғәләнең пәйғәмбәрҙәренә ышаныу.** Аллаһы Тәғәлә китаптар бирә, тип әйттек, ләкин Аллаһы Тәғәлә китаптарҙы кемдәр аша бирә? Пәйғәмбәрҙәр аша (ғәрәпсә - нәбий, рәсүл, русса - пророк). Мөхәммәт пәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткәнсә, йәмғеһе 124000 пәйғәмбәр булған.

Эйе, Аллаһы Тәғәлә кешеләрҙе бер ҡасан да яңғыҙ ҡалдырмаған. Уларға әленән-әле, тура юлды аңлатыр өсөн, Үҙенең илселәрен - пәйғәмбәрҙәрен ебәреп торған. Ошо донъяла ҡайҙа ғына кеше йәшәмәһен, ҡасандыр уларға пәйғәмбәр килеп, Аллаһы Тәғәләнең барлығын, берлеген һәм ахыр сиктә беҙҙең Уға ҡайтасағыбыҙҙы аңлатып киткән. Тик беҙ был пәйғәмбәрҙәрҙең ҡайны берҙәре тураһында ғына яҡшылап беләбеҙ. Ҡөрьәндә, мәҫәлән, 25 пәйғәмбәрҙең исемдәре телгә алынған: Әҙәм, Нух, Сәлих, Һуд, Иҙрис, Ибраһим, Лут һәм башҡалар, ғәләйһим сәләм (уларға сәләм). Пәйғәмбәрҙәр барыһы ла бер хаҡиҡәт - иман хаҡиҡәтен килтергән. Улар барыһы ла Аллаһы Тәғәлә тураһында аңлатҡандар, барыһы ла Аллаһы Тәғәләнең барлығын, берлеген һәм Уға ғибәҙәт итеү кәрәклеген һөйләгәндәр.

Мосолман кеше бөтә пәйғәмбәрҙәргә лә ышанырға тейеш. Һис бер ҡасан да мосолман, мәҫәлән: “Мин Муса пәйғәмбәргә (русса - Моисей) ышанмайым”, - тип әйтә алмай. Былай тип әйткән кеше Исламдан сығып китә. Әгәр мосолман ниндәйҙер пәйғәмбәрҙе пәйғәмбәр тип танымай икән, тимәк ул Аллаһы Тәғәләнең һүҙҙәрен инҡар итә. Шул уҡ Муса пәйғәмбәр ғәләйһиссәләм, мәҫәлән, Ҡөрьәндә күп урындарҙа атап әйтелгән. Пәйғәмбәрҙәрҙе инҡар итергә ярамай.

Әгәр барлыҡ пәйғәмбәрҙәрҙә бер үк нәмәне аңлатҡан икән, ниңә беҙ Мөхәммәт пәйғәмбәргә генә (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) эйәрергә тейешбеҙ, тип һорар кемдер. Яуап бирәбеҙ. Әйтәйек, хәҙерге көндә христиандар (насраниҙар), Ғайса пәйғәмбәр (Иисус) артынан эйәрәбеҙ, тиҙәр. Ләкин ысынында улар уның артынан тейешенсә эйәрмәй. Ғайса пәйғәмбәр үҙенә ғибәҙәт итеүҙе, табыныуҙы талап итмәне. Ә христиандар иһә бөгөн туранан-тура уға табыналар, шул рәүешле улар ширк (иң ҙур гонаһ!) эшләйҙәр. Ҡөрьәндә әйтелгән: “Аллаһы Тәғәлә Ғайса пәйғәмбәрҙән: “Эй Ғайса! Һин кешеләргә: “миңә һәм минең әсәйемә ғибәҙәт итегеҙ”, - тип әйттеңме?” - тип һораясаҡ. Ғайса пәйғәмбәр: “Дан Һиңә, Аллаһ! Мин быны әйткән булһам, Һин белер инең. Мин бит уларға: “Тик Аллаһҡа ғына ғибәҙәт итегеҙ!” - тип әйттем”, - тиер” Эйе, христиандар үҙ диндәрен ҡурҡыныс итеп боҙҙолар. Ә Ғайса пәйғәмбәрҙең өйрәткән нәмәләре иһә дөрөҫ хәлдә һаҡланып ҡалманылар.

Шуға Аллаһы Тәғәлә кешелеккә яңы пәйғәмбәр - Мөхәммәт пәйғәмбәрҙе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ебәрҙе. Уға эйәреү - кешенең берҙән-бер ҡотолоу юлы. Ә башҡа кешеләргә эйәргән бәхетһеҙҙәр Ҡиәмәт көнөндә бик ныҡ үкенерҙәр, ләкин ул көндә үкенес һәм илау-аҡланыуҙар ярҙам итмәҫ. Был турала Аллаһы Тәғәлә Ҡөрьәндә шулай ти: “Ул көндә залим кеше ҡулдарын тешләр һәм: “Аһ! Әгәр мин Аллаһ рәсүле менән бер юлды тотҡан булһам икән! Ниндәй ҡайғы миңә! Әгәр мин фәлән-фәләндә үҙемә дуҫ итмәгән булһам ине!” - тип әйтер”.

Эй, кешеләр! Ошо аятта әйтелгән фәлән-фәләндәр - ялған юл өйрәтеүселәр, алдаҡсылар артынан эйәрмәгеҙ! Ҡурҡыныс Ҡиәмәт көнөндә Фирғәүен, Будда, Рим папаһы, Ленин, Сталин, Гитлер, Саи-баба кеүек әҙәмдәр артынан эйәреүселәр шул үҙ кумирҙары менән мәхшәргә йыйылыр. Ә ҡотолоусы кешеләр - улар пәйғәмбәрҙәргә эйәргән бәндәләр булырҙар. Беҙҙең заманда күп кешеләр, диндәр араһында, пәйғәмбәрҙәр араһында айырма юҡ, улар барыһы ла яҡшылыҡҡа өйрәтә, шуға күрә беҙ диндәрҙе айырырға тейеш түгелбеҙ, һәр кемдең үҙ юлы, тиҙәр. Уларға яуап итеп беҙ шулай тиербеҙ: эйе, юлдар күп, быны Мөхәммәт пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) дә әйткән ине, ләкин был юлдарҙың барыһы ла Аллаһы Тәғәләгә илтәме? Юҡ! Әгәр Мөхәммәт пәйғәмбәрҙән алда йәшәгән ниндәйҙер пәйғәмбәрҙең береһе ул заманда тере булһа, ул үҙе лә бары тик Мөхәммәт ғәләйһиссәләм артынан эйәрер ине. Быны ла Мөхәммәт пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйтте: “Әгәр Муса тере булһа һәм минең пәйғәмбәр булған ваҡытында тура килһә, ул тик минең артымдан эйәрер ине”, Аллаһы Тәғәлә Ҡөрьәндә әйтә: “Был - Минең тура юлым, ошо юлдан барығыҙ!.. быны һеҙгә Ул васыят ҡылды. Моғайын, һеҙ тәҡүәле булырһығыҙ”. Йәғни, ислам дине - Аллаһы Тәғәләнең тура юлы, һәм ошо юлдан барыуҙы, башҡа юлдарға тайпылмауҙы Аллаһы Тәғәлә беҙгә васыят иткән.

**Ҡиәмәт көнөнә ышаныу.** Алдағы дәрестәрҙә беҙ, Аллаһы Тәғәлә кешеләрҙе Ҡиәмәт көнөнә йыясаҡ, тип әйткән инек. Әгәр кемдер, Аллаһы Тәғәләгә ышанам, ти икән, ул Ҡиәмәт көнөнә лә ышанырға тейеш. Ҡиәмәт көнө - ул Аллаһы Тәғәләнең бөтә кешеләрҙе лә терелтеп, тергеҙеп, Мәхшәр майҙанына йыйыуы. Ул көндә Аллаһы Тәғәлә бөтә кешеләрҙән дә яуап аласаҡ: “Ниңә һин шул эште эшләнең? Ниңә был гонаһты ҡылдың? Ниңә шул нәмәне эшләмәнең? Ниңә намаҙ уҡыманың? Ниңә ураҙа тотманың? Ниңә зәкәт бирмәнең?” һәм башҡа. Йәғни, Аллаһы Тәғәләнең әмерҙәренә ҡағылышлы һорауҙарға яуап бирәсәкбеҙ. Аллаһы Тәғәләгә ышанам, ләкин Ҡиәмәт көнөнә ышанмайым, тигән кешенең иманы камил түгел, ул кеше иман рөкөндәренең береһен инҡар итә. Иман рөкөндәре - өйҙөң нигеҙ таштары кеүек. Әгәр нигеҙҙән төп таштарҙың береһен алһағыҙ, өй емерелеп төшәсәк. Иман менән дә шулай уҡ: әгәр кеше имандың ниндәйҙер бер шартын инҡар итә икән, был иман камил булмаясаҡ, йығыласаҡ. Ысынлап та, нисек инде кеше Аллаһы Тәғәләгә ышанһын да, Ҡиәмәт көнөнә ышанмаһын, Әллә Аллаһы Тәғәлә үлеп сереп бөткән кешеләрҙе ҡабаттан тергеҙә алмай, тиһегеҙме? Тирә-яғыбыҙға ҡарағыҙ: мәҫәлән, яҙ көнө бөтөн донъя ҡабаттан терелә.

Ә Аллаһы Тәғәлә Ҡөрьәндә әйткән: “Шулай уҡ беҙ кешене лә терелтәсәкбеҙ”, - тип. Беҙ ергә ташлаған орлоҡ Аллаһы Тәғәләнең әмере менән үҫеп сыға һәм үҙенә оҡшаш күпме яңы орлоҡтар бирә. Һәм былар барыһы ла Аллаһтың әмере һәм ихтыяры менән генә була.

Әллә Аллаһы Тәғәлә кешеләрҙе шулай уҡ тергеҙә алмаймы ни? Әлбиттә, тергеҙә ала. Ҡөрьәндә әйтелгән: “Кешеләрҙе тергеҙеү уларҙы тәүге тапҡыр юҡтан бар итеүгә ҡарағанда еңелерәк...”. Ҡасандыр элек донъяла бер нәмә лә булмаған - бер тере молекула ла, бер тере атом да.

Һәм Аллаһы Тәғәлә бар тереклекте яратҡан, шул иҫәптән - кешене лә. Иң тәүҙә уны юҡтан бар итеп тә, аҙаҡ миллион-миллиард молекуларға таркалған кешене Аллаһы Тәғәлә ҡабаттан йыя алмаймы ни? Әлбиттә, йыя ала.